**8–се практик эш**

**Темаһы:** Һаулыҡ – сифатлы эштең нигеҙе. Здоровье – залог качественной работы.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе, ҡылымдың юҡлыҡ формаһын барлыҡҡа килтереү буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на образование полных и неполных предложений, отрицательной формы глагола.

**Маҡсат:** һаулыҡ тураһында әңгәмәләшеү, тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе, ҡылымдың юҡлыҡ формаһын барлыҡҡа килтереү буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.

2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж**

**1.Һүҙлек:** һаулыҡ, сәләмәтлек – здоровье ауырыу - болезнь

ауырыу (кеше) – больной ауырыйым – болею дауаларға - лечить

баш дарыуы - лекарство от головной боли файҙалы - полезный

укол эшләргә – делать укол дарыу - лекарство

операция эшләргә – оперировать дарыухана - аптека

юғары – высокое хәл юҡ – нет сил һыҙлай - ноет

хәлһеҙлек – слабость ауырта – болит әйләнә - кружится

**2.Тулы һәм кәм һөйләм – полное и неполное предложение.** Неполными называютс такие предложения, в которых осутствует какой – либо член, хотя он формально предусмотрен структурой данного предложения. Например: - Ниндәй яңылыҡтар бар? – Какие есть новости? - Яҡшы – Хорошие

**3.Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы – отрицательная форма глагола** – образуется путем присоединения к корню (основе) глагола отрицательных частиц **-ма, -мә.** Далее идут аффиксы времени глагола и лица: мин эшләйем – мин эшлә**мә**йем.Һин ашайһың – һин аша**ма**йһың. Ул йоҡланы – ул йоҡла**ма**ны.

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем.** Тексты күсереп яҙығыҙ. (Спишите текст. Найдите неполные предложения):

- Алло, алло! Был “Ашығыс медицина ярҙамы”мы?
- Эйе, тыңлайым һеҙҙе. Ни булды?
- Минең эсем ауырта. Температурам юғары.
- Фамилияғыҙ, исемегеҙ, атайығыҙҙың исеме нисек?
- Дмитриева Наталья Андреевна.
- Тулы йәшегеҙ?
- 18.
- Адресығыҙ?

- Ленин урамы, 16 – сы йорт, 22 – се фатир.
- Көтөгөҙ, хәҙер килербеҙ.
- Тиҙерәк килегеҙ! Хәлем насар!

**2 – се бирем.** Бирелгән һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Переведите предложения на русский язык: 1. Беҙҙең төркөмдә бер нисә студент грипп менән ауырый. 2. Кисә беҙ олатайыма врач саҡырттыҡ. 3.Хәҙерге заманда йөрәк – ҡан системаһы ауырыуҙары бик йыш осрай. 4. Бәләкәй балаларҙың теше йыш һыҙлай. 5.Спорт менән шөғөлләнеү организмдың сәләмәт булыуына ярҙам итә.

**3 – сө бирем.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ (переведите предложения на башкирский язык):1.У меня болит голова. 2.У меня высокая температура. 3. Моя мама болеет. 4. Я выпил лекарство от головной боли.5. Здоровье – залог качественной работы. 6.У него ноет зуб. 7. Ты не болеешь.

**4-се бирем. Вариантлап эшләү.** Ҡылымдың юҡлыҡ формаһын барлыҡҡа килтерегеҙ (образуйте отрицателную форму глагола):

**по образцу** – Мин ауырыйым (я болею) – мин ауыры**ма**йым (я не болею).

1. **се вариант:** 1. Минең башым ауырта 2. Һинең тешең һыҙлай. 3. Беҙҙең төркөмдә грипп менән ауырыйҙар. 4. Уның ҡулы ауырта.
2. **се вариант:** 1.Минең эсем ауырта. 2. Беҙҙең олатайыбыҙ диабет менән ауырый. 3. Уларҙың эте ауырый. 4. Һинең ҡолағың ауырта.

**5-се бирем.** Бирелгән кәңәштәрҙе күсереп яҙығыҙ, 2 –әүһен башҡорт теленә тәржемә итегеҙ (спишите данные советы, 2 из них переведите на башкирский**):**

Закаляйся! Сыныҡ!

1.Каждый день мой ноги прохладной водой.
2.Приучай себя спать с открытой форточкой.
3.Ходи босиком по полу, а летом – по земле.
4.Утром обтирай тело влажным полотенцем.
5.Летом купайся, бегай, прыгай.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң**
**студент белергә һәм эшләй һәм ҡуллана белергә тейеш:**

1.Һаулыҡ, сәләмәтлек тураһында, уларҙың әһәмиәтен билдәләргә, кәм һәм тулы һөйләмдәр, ҡылымдың юҡлыҡ формаһы тураһында, уларҙың телмәрҙәге урынын билдәләргә,

2.Һаулыҡ, сәләмәтлек тураһында һөйләмдәр төҙөү, ҡылымдың юҡлыҡ формаһын барлыҡҡа килтереү, телмәрҙәге урынын билдәләү буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1. Нимә ул һаулыҡ? 2. Һинең һаулығың нисек? 3. Һин һаулыҡ – сифатлы эштең нигеҙе, тигән һөйләм менән килешәһеңме? Ни өсөн?

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 178-180 - се биттәр, Л.2.49 – сы бит. Кәм һөйләмдәрҙе ҡулланып диалог төҙөргә.

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.